*Вәкил ХАЖИН,*
*Силәбе дәүләт университетының*
*дөйөм һәм төрки филологияһы кафедраһы мөдире*

# Әш үҙебеҙҙән тора

Силәбе өлкәһендә 210 меңдән ашыу башҡорт иҫәпләнеп, шуларҙың 40 меңдән ашыуы Силәбе ҡалаһында йәшәй. Шулай итеп, Силәбе үҙендә йәшәгән башҡорттар һаны буйынса Өфөнән ҡала икенсе урында тора.

Күптән түгел Силәбе өлкәһендә туған тел, мәҙәниәт мәсьәләләре ҡырҡыу торһа, әле ауылдарҙа ошо йүнәлештә бер ни тиклем үҙгәреш һиҙелә, ә ҡалаларҙа хәл шул көйө ҡала. Бер аҙ ҡыбырлап алалар ҙа тынысланалар. Мәҫәлән, Мейәс ҡалаһында туған тел уҡытыу башланғайны, аҡса юҡлыҡҡа һылтанып туҡталып ҡалды.

Магнитогорск ҡалаһының 54-се мәктәбендә башҡорт класы асылып, уҡыусыларҙы туғыҙынсы класҡа еткерҙеләр. Әммә һуңғы ике йылда беренсе класҡа балалар ҡабул ителмәй. Силәбе ҡалаһында ла ҙур ҡыйынлыҡ менән бер балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө булдырғайныҡ, быйыл ул да ябылды. Башҡорт теленең һирәк-һаяҡ яңғырауы, белдереү таҡталарында башҡорт яҙыуҙарының күренеп ҡалыуы бөгөнгө Силәбелә тик энтузиастарҙың ғына хеҙмәте ул.

Был төбәктәге башҡорттар өсөн Сибай дәүләт университетының филология факультетында башҡорт бүлеге асылыу ҙур әһәмиәткә эйә булды. Унда көндөҙгө бүлектә 140 талип, ситтән тороп 35 кеше белем ала, шуларҙың 20-һе Силәбе ҡалаһынан. Ошо талиптар, аҙ булһалар ҙа, халыҡтың үҙаңын үҫтереүгә ҙур өлөш индерәсәк. Улар араһында үткәрелгән анкета шуны күрһәтте: «Тәүҙә туғандар, таныштар беҙҙең ошо бүлеккә уҡырға инеүебеҙгә аптырап ҡалғайны. «Ул диплом менән ҡайҙа бармаҡсы булаһың?» — тиеүселәр күп булды. Ә хәҙер беҙ, университетта лекцияларҙы тыңлап, уларға (туғандарға, таныш-белештәргә) башҡорттар хаҡында яңы мәғлүмәттәр һөйләй башлағас: «Беҙҙең дә шунда барып, тыңлап ултырғыбыҙ килә», — тиҙәр талиптар.

Силәбе ҡалаһында өлкә башҡорттарының ҡоролтай башҡарма комитеты, башҡорт халыҡ үҙәге, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ойошмаһы, «Аҡмулла» клубы эшләп килә, дини ойошмалар ҙа бар.

Өлкәлә йәшәгән халыҡтың үҙаңын күтәреү йәһәтенән ҡоролтайҙар үткәреү бик әһәмиәтле булды. М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, филармония артистарының Силәбе өлкәһендә һәм ҡалаһында йыш сығыш яһауы ла ифрат ҙур роль уйнаны. Башҡортостандың сәнғәт оҫталары ойошторған спектаклдәрҙә һәм концерттарҙа зал шығ-

рым тулы була, ә һуңынан артистарҙы сәхнәнән сығармай оҙаҡ алҡышлайҙар. Ололар ғына түгел, йәштәр ҙә бирелеп ҡарай бындай тамашаларҙы.

Әммә Силәбе ҡалаһы башҡорттарын борсоған проблемалар ҙа байтаҡ. Иң мөһиме — тел мәсьәләһе. Бөгөн ҡалала башҡорт теле бөтөнләй ҡулланылмай тиерлек. Анкета мәғлүмәттәре буйынса, башҡорт ғаиләләренең 20 процентында ғына башҡорт теле һирәк-һаяҡ ҡулланыла, 40 проценты туған телдәрен бөтөнләй онотҡан, йәғни ата-әсәләр үҙҙәре туған телдә һөйләшә, уҡый-яҙа белмәй. 20 процент башҡорт ғаиләһе «башҡорт теле нимәгә кәрәк ул?» тип иҫәпләй. Шуны ла билдәләргә кәрәк, башҡорттарҙың 40 проценты ошо милләт вәкиле булыуы арҡаһында ғына ла төрлө сикләүҙәргә дусар ителә. Мәҫәлән, башҡорт исемдәрен төрлөсә үҙгәртеү, юғары вазифаға тәғәйенләмәү, мыҫҡыл итеү, туған телдә һөйләшеүҙе тыйыу һ.б.

Ҡалала үткәрелгән анкета яуаптарына ҡарағанда, Силәбе ҡалаһындағы башҡорттарҙың 70 проценты үҙ исемен төрлөсә боҙоуҙарға юл ҡуя. «З» хәрефенә башланған исем — Зоя, Зуля; «Г» хәрефенә булһа — Галя йәки Гуля тип «ҡыҫҡартыла». Исемдәре «Ф» хәрефенә башланған ирҙәр — бөтәһе лә Федя. (Әйткәндәй, минең үҙемә лә бер-ике тапҡыр «Владимир Иванович» тип өндәшеп ҡаранылар). Күптәр ошо ҡыҫымға түҙмәй һәм исемдәрен үҙгәртеү менән ризалаша.

Әлеге ваҡытта Силәбе башҡорттарының балалары араһында Европа илдәрендә киң таралған Эльза, Артур, Марат, Рим һәм Андрей, Ольга, Артем, Валерий, Игорь, Виктор кеүек исемдәр айырыуса йыш осрай.

Анкеталағы «Балағыҙҙы башҡорт телен өйрәнә торған класҡа уҡырға бирер инегеҙме?» тигән һорауға 30 процент респондент ыңғай яуап бирҙе. Был ҙур өмөт уята, сөнки Силәбе ҡалаһы өсөн 2 меңгә яҡын кешегә тиң ул. Тимәк, ҡалала башҡорт телен өйрәнергә теләүсе балалар өсөн 4 мәктәп асырға мөмкин.

Халыҡтың үҙаңын үҫтереү өсөн иң уңайлы сара — башҡорт телендә телевидение тапшырыуҙары ойоштороу. Силәбе ҡалаһында, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бындай тапшырыуҙар юҡ дәрәжәһендә. Айға бер-ике тапҡыр Башҡортостан телевидениеһынан алынған 20-30 минутлыҡ концерттарҙы ғына күрһәтеп алалар. Улары ла йә бик күптән төшөрөлгән видеояҙма була, һәм бер-нисә тапҡыр күрһәтелгәнлектән иғтибарҙы йәлеп итмәй.

Башҡортостан телевидениеһы тапшырыуҙары Силәбе өлкәһенә етә башлаһа, бөгөнгө көндәге байтаҡ мәсьәләләр хәл ителер ине, моғайын. Һәр хәлдә, мин үҙем шундай фекерҙәмен.

Әлеге ваҡытта өлкәләге 110-дан артыҡ белем биреү учреждениеһында 12 меңгә яҡын бала туған телен өйрәнә, уларға туған тел серҙәрен 200 уҡытыусы өйрәтә. Уҡытыусыларҙың күбеһе — махсус юғары белемле, уларҙың оҫталыҡ кимәлен күтәреүгә лә даими иғтибар бирелә. Миңә, мәҫәлән, март айында ғына жюри ағзаһы булараҡ ике конкурста ҡатнашырға тура килде. Унда еңеүселәр Башҡортостан Республикаһында уҙғарылған конкурстарҙа ла лайыҡлы сығыш яһай алыр ине, тип уйлайым.

Алты йыл рәттән башҡорт теле буйынса өлкә олимпиадалары үткәрәбеҙ. Уҡыусылар Башҡортостанда уҙған олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай.

Дөйөм алғанда, Силәбе өлкәһендә һәм ҡалаһында йәшәгән башҡорттар алдында торған һәм хәл ителәһе мәсьәләләр байтаҡ. Эштәр ошо көйө барһа, уңыштар яуланасағына ышанам. Анкетаға яуап биреүсе берәү яҙғанса: «Беҙҙең, башҡорттоң, киләсәге шул инде: шым ғына, артта ғына ултырайыҡ, беҙгә теймәҫтәр әле. Заводта берәй эш табылыр әле», тигән кеүек булмаҫ, тип өмөтләнәм. Эш үҙебеҙҙән тора.